# Ер һәм Йыһан улы - Рәшит Назаров



# “Рәшит Назаров – беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙең күгендә балҡып атылған иң яҡты йондоҙҙарҙың береһе...”Р.Мифтахов

**Башҡорт әҙәбиәтенең яҡты йондоҙо  Ауырғазы тупрағында тыуып,Өршәк һыуын эсеп,тәбиғәтенә һоҡланып үҫкән шағир ул.**

# Шағирҙың әҙәби мираҫы

**Шиғырҙары ошо йондоҙҙар кеүек бик күптәр һәм улар һүнмәҫ ижад ынйылары. 1965 йылда “Таңды ҡаршылау”**

**1970 йылда “Ҡояш юлы буйлап”**

**1989 йылда “Ағиҙел» ж-лында 40 шиғыры**

**1991 йылда “Йөрәгемде һеҙгә илтәм ”**

**1993 йылда “Йәшен”**

**2002 йыл-“Һайланма әҫәрҙәр” 1 том,**

**2005 йылда -**

**“Һайланма әҫәрҙәр” 2 том китаптары донья күрә.**

# “Ерем шары-өйөм минең,
# Бөтә йыһан –минең урам…”

**Р. Назаров**

**Шағир өсөн ЕР-ул планета ғына түгел,
ә ер - тыуған тупраҡ,туйындырыусы,
һыйындырыусы,шул уҡ ваҡытта
ҡурсалауға мохтаж сабый ҙа,күпте
кисергән йомаҡлы ҡарт та,йылыһын
биреүсе ЕР-әсә лә,ер-ул тарих
һандығы,сер йомғағы.**

**…Йырға йомарт йомаҡлы ҡарт –
минең ерем .**

**Һәр бер гөлө һаҡлай йәшәү серен.**

**Әгәр шуны тоя белһәң,бәхетле һин.**

**Йыр килтерер ергә тамған тирең.**

**Ер  - ул йәшәү сығанағы,кешегә,
тереклеккә ғүмер,йән биреүсе.**

bestwallpapers.net.tc

Йыһан икһеҙ – сикһеҙ,унда иркен осорға, йөҙөргә мөмкин.Был үҙенсәлек шағирға бар оҫталығын егеп, иркенләп ижад итергә,үҙ һүҙен әйтергә мөмкинлек биргән.

**Ул бик бай образдар системаһы менән эш итә. Йондоҙҙар,”Ай-көмөш ураҡ””яңғыҙ көймә”,”күк-күк диңгеҙ”, Ҡояш - “алтын ҡошсоҡ”,“алтын бөркөт”. Шағирҙың бар булмышын бар итеүсе,йәшәүгә дәрт,илһам биреүсе йондоҙҙар,Ай,Ҡояш, зәңгәр күк,йәғни бөтә Йыһан.**

Уртаҡ булды ер өҫтөндә
Һауа,ҡояш,күк,Етегән…
Р.Назаров

- Ер һәм Йыһан шағир ижадының мәңгелек темаһы. Уй-хыялдарын,хис-тойғоларын ошо образдар системаһы,тема аша уҡыусыға еткерә алды. Башҡорт поэзияһында Ер, Йыһан  темаһы беренселәрҙән булып Рәшит Назаров шиғриәтендә баҙыҡ сағылыш тапты.Шағир Кешелектең асылын тап ошо образдарҙа күрә,ошо төшөнсәләр аша яҡтырта.

Ҡайғырмасы,ҡайғы бөтмәҫ,артып торор,

Ә йондоҙҙар күктә мәңге балҡып торор.

Тупрағыңдан һыҡҡан кирбес бушҡа китмәҫ,-

Башҡаларға һарай булып ҡалҡып торор.

Ғ.Хәйәм



- 1993 йылда Р.Назаров республикабыҙҙың яҙыусылар Союзына ағза итеп ҡабул ителә.
- 1996 йылда Ауырғазы районы хәкимиәте тарафынан булдырылған Ғәлимйән Ибраһимов исемендәге премияның беренсе лауреаты була.
- 2004 йылда Рәшит Сәитбаттал улы Назаров
- Башҡортостан Республикаһының С. Юлаев исемендәге Хөкүмәт премияһына лайыҡ булды.

Ҡәләм ята…Килмәҫ шағир ҡабат,
Юҡһынһа ла уның өҫтәле.
Тик өҫтәлен һөйөп,ҡарап үтә
Бик күп күҙҙәр – төрлө төҫтәге.

Мин дә үтәм.Ә ҡәләмде күргәс,
Әрнеү киҫте минең йөрәкте.

Р.Ғарипов.

©KAGAYA
http://www.hoshinavi.com/